## Ғилем һәм ғәмәл

# ҠОРБАН ҒӘЙЕТЕ ТУРАҺЫНДА

Рәмил хәҙрәт НАСИРОВ

Ҡорбан ғәйете - бөтә мосолман донъяһы өсөн ҙур байрам. Ул Ураҙа байрамынан һуң 70 көн уҙғас, йыл һайын Зөлхизә айының унынсы көнөндә билдәләнә.

“Ҡорбан” һүҙе “яҡынайыу” мәғәнәһендә, Аллаһы Тәғәләгә изге ғәмәлдәр менән яҡынайыуҙы аңлата. Ҡорбан салып, беҙ Раббыбыҙға яҡынлығыбыҙҙы тағы бер иҫбатлайбыҙ. Ә нимә менән яҡын булабыҙ һуң? Салған ҡорбандарыбыҙҙың ите лә, һөйәге лә, майы ла, йәне лә Аллаһы тәғәләгә ирешмәй бит. Пәйғәмбәребеҙ үҙенең хәҙисендә: “...Аллаһы Тәғәләгә күңелдәрегеҙҙәге имандарығыҙ, ихласлығығыҙ ирешә. Аллаһ ризалығы өсөн салынған ҡорбандың ҡанынан беренсе тамсыһы ергә төшкәнсе, Аллаһ шул кешенең гөнаһтарын ярлыҡар”, - ти.

Аллаһы Тәғәлә пәйғәмбәребеҙҙең йыраҡ бабаһы Ибраһимдан: “Әгәр миңә ир бала бирһәң, мин шул баламды ҡорбан итеп салырға ла әҙер”, - тигән һүҙҙәр менән нәҙер әйттерҙе.

Ләкин Аллаһы Тәғәлә әҙәм балаларының ҡандары түгеүсе түгел, ул бары шул рәүешле Ибраһим ғәләйһиссәләмде һынаны. Ибраһим был һынауҙы бик яҡшы үтте. Аллаһ унан риза булды. Исмәғил ғәләйһиссәләмде ҡорбан итеп салырға алып барғанда шайтан: “Һине атаң майҙанға алып бармай, ә салырға алып бара”, - тип Ибраһимдың Раббыһына әйткән нәҙерҙе үтәүенә ҡаршы сыҡмаҡсы булды. Шунда Исмәғил ғәләйһиссәләмдең иманына ҡарағыҙ, ул был хәлдә лә: “Әй, атайым, Аллаһы Тәғәлә нимә бойорған булһа, шуны эшлә, иншаллаһ, мине сабыр итеүселәрҙән табырһың”, - тиергә үҙендә көс тапты. Үҙ балаһын һуйырға алып бара торған атаның һәм ҡорбан ителәсәк баланың иманын Аллаһы Тәғәлә бына шулай һынаны. Инде салам тигәндә, Ибраһим ғәләйһиссәләмгә: “Әй, Ибраһим! Раббыңа әйткән нәҙереңә тоғро булыуынды иҫбатланың. Аллаһ һинән риза булды. Инде ҡорбан итеп улыңды түгел, ҡуй сал”, - тигән. Шул ваҡыттан бирле ҡорбан салыу беҙгә байрым булып ҡалды.



Ҡорбан байрамы көнө - Ғәрәфә көнө - туғыҙынсы Зөлхизәнән һуң килә. Йылдың иң мөбәрәк кисе Ҡәҙер кисе булһа, йылдың иң ҙур, изге көнө - Ғәрәфә, мосолмандарҙың иң изге бурысы һаналған хаж ғәмәлдәрен ҡылыу көнө. Был көндә мөъмин-мосолмандар ғүмерҙәрендә бер тапҡыр булһа ла хажға килә һәм Мәккә янындағы Ғәрәфәт тауына бара, тау итәгендә намаҙ уҡый. Байрам көнө, исеме лә ана шул изге исеменән алынып, Ғәрәфә көнө тип атала һәм ул иң ҡәҙерле, изге, оло хөрмәткә лайыҡлы байрам көнө итеп билдәләп үтелә. “Хаж - ул Ғәрәфә, - тине пәйғәмбәребеҙ. - Был көн - Аллаһы Тәғәлә күп кешене уттан ҡотҡарған көн. Был көндә ураҙа тотҡан кешенең үткән йылғы һәм башҡа гөнаһтары ла ғәфү ителер”. Был ҙур көндә миллионлаған мөъмин-мосолман ҡәрҙәштәребеҙ хаж ҡыла. Ошо уҡ көндә Әҙәм менән һауа йәннәттән ергә төшөрөлгәндән һуң, ошо Ғәрәфә ерендә гөнаһтары ғәфү ителеп, осраштылар. “Зөлхизә айының беренсе ун көнөндә эшләнгән изгелектәрҙән дә Аллаһыға һөйкөмлөрәк эш юҡ”, - тине пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт. Ошо изге көндәрҙән һуң мосолмандар унынсы Зөлхизәлә Ҡорбан ғәйетен байрам итә. Иртән ҡояш сығыу менән мосолмандар төркөм-төркөм йыйылып, урам буйлап барғанда тәкбир әйтеп, мәсеткә йыйылалар. Мәсеткә ике рәкәғәт ғәйет намаҙы уҡыйҙар. Ҡорбанды байрам намаҙынан һуң башлап ун икенсе Зөлхизәнең аҡшам ваҡытына ҡәҙәр салырға була. Мөмкинлектәре булған һәр ғаилә, хужа үҙе һәм ғаиләһе исеменән Аллаһты ҙурлап ҡорбан сала. Мосолмандар бер-береһен ҡотлай, байрам табындарына саҡыра. Ғаилә ағзаларына, туғандарына, балаларына бүләктәр өләшәләр.

Ҡорбанды фәҡәт Аллаһ хаҡы өсөн генә салалар. Әгәр берәйһе генә булһа ла ит өсөн тип ҡушылһа, башҡаларҙыҡы ла ҡабул ителмәй. Сөнки һарыҡ-кәзә берәр кеше исеменән булһа, һыйыр, дөйә ете кеше йәки ғаилә исеменән һуйылырға мөмкин. Салынасаҡ мал һаусәләмәт булырға тейеш. Һуҡыр, аҡһаҡ, тешһеҙ, ҡолаҡһыҙ, елеге кибәрлек дәрәжәләге ябыҡ, мөгөҙө йәки ҡойроғо төбөнән үк өҙөлгән хайуандарҙы ҡорбанға салыу дөрөҫ булмай.

Ҡорбанлыҡтың ите йә иһә тиреһе һатылырға тейеш түгел. Бай кешеләр тиреһен һәм ҡорбан итенең өстән бер өлөшөн саҙаҡа ҡылырға тейеш, был бик һауаплы ғәмәл. Мохтаж кеше һис бер нәмәне саҙаҡа ҡылмайынса, үҙ файҙаһына тотонһа ла дөрөҫ булыр. Аллаһы Тәғәлә Ҡорбан ғәйетен, был мөбәрәк көндә уҡыған намаҙҙарыбыҙҙы, ғибәҙәттәрҙе, ғәмәлдәрҙе һәм салған ҡорбандарыбыҙҙы ҡабул итһен. Күңелдәребеҙгә иман байлыҡтары биреп, динебеҙҙе тормошобоҙ рәүешенә әйләндерергә Раббыбыҙ үҙе тәүфиҡ бирһен!

## Кескәйҙәргә уҡығыҙ

# УРАҘА БАЙРАМЫ



Факиһа ТУҒЫҘБАЕВА

Һуңғы арала Рәмзиәнең өләсәһе көн буйы ауыҙына тәғәм дә ризыҡ ҡапмай.

- Ниңә улай ас йөрөйһөң, өләсәй? Әллә ауырыйһыңмы? - тип һораны бер көн Рәмзиә, аптырап.

- Ураҙа тотам бит, балаҡайым.

- Нимә була ул “ураҙа”? Балыҡ тотҡандарын беләм, ураҙа тотҡандарын белмәйем.

- Рамаҙан айында һәр мосолмандың изге бурысы ул ураҙа. Көнө буйы ашамайһың. Төн дә, йән дә таҙарына.

- Ә мин ашамай торалмайым, өләсәй.

- Мин дә ашайым бит. Сәхәр сәйе әсәм.

- Эй өләсәй, әллә нисек итеп һөйләйһең, аңламайым.

- Ҡояш ҡалҡыуҙан ике сәғәт алда ашаһаң, шул сәхәр була, белдеңме? Һин минең сәхәр сәйе эскәнде күрмәй ҡалаһың. Йоҡоһо туйғансы йоҡлаһын тип уятмайым бит.

- Кис булһа, “ауыҙ асам” тиһең дә тораһың, өләсәй? Ауыҙың бикле тормай ҙа инде.

Мәрхәбә инәй ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

- Ҡалай зиһенле минең ейәнсәрем. Бөтәһен дә күреп, күҙәтеп йөрөй икән дә...

- Ураҙа тотҡан кеше, ҡояш байығас, тамаҡ туйҙыра. Шул ауыҙ асыу була ла инде. Бер семтем тоҙ, бер-ике йөҙөм йәки бер йотом һыу йотоп ауыҙ асам. Унан һуң намаҙ уҡыйым да туйғансы ашайым.

Өләсәһенең ураҙаһы тамамланғас, ул ейәнсәрен Ураҙа байрамына алып барҙы. Иртән иртүк икәүләп ғөсөл, йәғни һыу ҡойондолар. Матур кейемдәрен кейеп, мәсеткә юл тоттолар.

Мәсеттә бөтәһе лә Ураҙа ғәйете намаҙына баҫты. Матур күлдәк кейгән, башына яулыҡ бәйләгән Рәмзиә мөйөштә шым ғына тыңлап ултырҙы. Намаҙ төшкә тиклем дауам итһә лә, ҡыҙыҡай һис арыманы. Мәсеттән һуң өләсәһе уны үҙенең әхирәте Зөләйха инәйгә ҡунаҡҡа алып барҙы. Унда ҡупшы кейенгән әбейҙәр йыйылғайны. Улар бер-береһен Ураҙа байрамы менән ҡотланы, аш ашаны. Тәмлекәстәр менән сәй әсеүе бигерәк күңелле булды.

## Шиғри тулҡында

Зөфәр ВӘЛИТ

### Йәнгә өндәшеү



*Йәнем, беләм бер саҡ минең*
*Тәнем һинһеҙ үлерен.*
*Беләһеңме икән ҡасан*
*Уға әжәл килерен,*

*Беләһеңдер, тимен, сөнки*
*Һине “үлемһеҙ” тиҙәр.*
*Шулай булмаһа, ҡайҙарҙан*
*Тыуа үлемһеҙ көйҙәр,*

*Бәйләнешен барҙыр һинең*
*Бөйөк Аҡыл-Аң менән.*
*Юғиһә мин төнөн үлеп,*
*Тыумаҫ инем таң менән,*

*Өндәшмәйһең. Беҙ - бер йәндер*
*Бурандарҙы һайратҡан,*
*Тимәк, беҙҙе Илаһи көс*
*Камил итеп яратҡан.*

*Тормошто беҙ балҡытһаҡ та,*
*Ялҡытһаҡ та - бергәбеҙ.*

*Икәү ҡорған донъябыҙҙы*
*Ят ҡулдарға бирмәбеҙ!*

*Беҙ беләбеҙ: был донъяла*
*Изге эштәр үлмәҫ ул...*
*Тәнгә әжәл килгәндә лә,*
*Беҙгә әжәл теймәҫ ул,*